# Ғ и л м и я з а

Ғилмияза Таһир ауылының етем бер кыҙы була. Уны Кыҙырасов тигән бай һатып ебәрә.

Алыҫтарҙан ялтырап та күренә
Ғилмияза һылыу тәңкәһе;
Тамьянда ла юк,Тиләүҙә лә юк,
Кайҙа икән Ғилмияза әңкәһе?

Һакмарҙа ғына һыуы түбән аға
Киблаға карап, кән битләп;
Ғәзиз илдәремә кайтыр инем
Аякайҙарым талһа, имгәкләп.

Ат карағай тауҙың ай башында
Калды минең уйнаткан таштарым;
Һигеҙ генә туғыҙ әй йәшемдә
Сит илдәргә китте баштарым.

Кыйғас та ғына кыйғас әй каҙ кыскыра
Был ниндәй ҙә генә ерҙең каҙы икән?
Һакмар ғына буйын белеп йырҙай,
Был ниндәй ҙә ирҙең кыҙы икән?

Әбйәлил районы Таһир ауылында Рәхимьян Әлибаевтан яҙылды.

5/ҮШ-52.